# Ғ Ү М Ә Р О В

Ғүмәров ул беҙҙең яктың, Ошо Рәхмәт ауылының кешеһе. Бик шәпте кеше булған. Ун һигеҙ йәшендә ауыл страростаһы, егерме йәшендә вулысный старшина хеҙмәтен үтәгән. Халк өсөн ихлас тырышкан үҙе. Ул вакытта был як Күбәләк-Тиләү вулысы тип йөрәтөлә ине. Вулыс Казаккол ауылында булды. Хәҙер Учалыға карай.

Бик шәп аты бар ине Ғүмәровтың Үҙе үлгәс, атына менеп йөрөнөм. Хәҙер миңә 78 йәш. Ул сакта, атам указный мулла булғанда, бер 15 йәштәрҙә бар инем инде мин.

Ғүмәров старшина вакытында бөтә ауылдарҙы сакыртып, ҙур йыйын яһап, бәйгеләр үткәрә, батырҙар көрәштәрен йыйын йыя торғайны. Үҙе шул чахөт әләктереп, бик йәштәй әрәм булды, мәрхүмең. Рәхмәттә бөтөн ауыл белә аны. Улының улы Вәлит шухәтте уның үҙенә окшағайны. Койоп куйған Ғүмәров инде бына. Бик тә акылды, бик тә зиһенде ул булды. Мона ошо һуғыштан кайтманы инде. һәләктәй егеттәр тороп калды. Мәжлестәрҙә Ғүмәров телдән төшмәй ул. Йырҙары былай уның

## "Ғүмәров йырҙары"

1.

Боғаҙакай күлгә кармак һалдым,
Кармағыма сабак капманы;
Дарыу- дарман бөттө, хәлем бөттө,
Ғәзәлемә дарыу тапманым.

Ғүмәровтың кейгән баса туның
Яғаһынан тотоп кемдәр эләр ул;
Ғүмәровтан калған ике бала
Баштарынан һыйпап кемдәр һөйәр ул.

Ян тәҙрәкәйҙәрендә әй асып куй,
Буз аркаһын күреп ятайым;
Апкилегеҙ мулла, укыһын ясин
Асылыма инде кайтайым.

Каҙ бәпкәйҙәре һары ла була,
Теҙелеп-теҙелеп һыуға бара ул;
Ғүмәровтан калған ике бала
Тилмереп тә кемгә бара ул.

П.

Башкынайым ауырый , үләм инде,
Кәберемде тәрән каҙығыҙ;
Баш осома куйған таштарына
Исем-фамилиямды яҙығыҙ.

Ғүмәровтың кейгән бүре туның
Элеп куй торған сөй ҙә юк;
Ғүмәровты беҙҙән һораһағыҙ,
Асылына кайткан, өйҙә юк.

Һыуһап та ғына килеп эскәндә
Боғалактай күлдәй һыу кайҙа;
Күбәләк-Тиләүский вулысында
Ғүмәровтай зирәк ир кайҙа.

Ғүмәровтың менгән кир атының
Тараған да кеүек ялдары;
Кемдәрҙән дә калмай, кемдәр алмай
Был фани донья малдарын.

Ш.

Ишегемде асып әй куйығыҙ,
Ялан ереп күреп ятайым;
Апкилегеҙ мулла, укыһын ясин,
Асылыма инде кайтайым.

Ғүмәровтың менгән кир атының
Үреп һалған кикелде ялдары;
Кемдәрҙән дә калмай, кемдәр алмай
Фани ғына донья малдарын.

Ғүмәров та үҙе әй ир ине,
Кейгән тункайҙары бүр/е/ ине;
Бер аҙырак һөйҙәп, күп аңдаткан
Бер вулыста яңғыҙ ҙа ир ине.

Алтын ғына тәңкә әй бирәйем,
Ал миҙәүкәйеңә баҫырһың;
Аппак кына йөҙөң, кара күҙең
Кем кулкайҙарына калырһың.

-Ғүмәров йыры" тип йөрөтөлгән был йырҙар Әбйәлил районының Байым, Ташбулат ауыл Советтәренә караған байтак ауылдарҙа йырлана, курайҙа уйнала.

Үрҙәге йырҙар

1. Байым ауыл Советенә караған Иәнекәй ауылында

йәшәүсе Малбай Дауытов карттан,

П. Моракай ауылында йәшәүсе Хәсән Гелметдиновтан /1911 йылғы/ һәм

Ш. Ташбулат ауыл Советенең Ташбулат ауылында йәшәүсе Гәлләм Хисматовтан /1904 йылғы/ язып алынды.

Гүмәровтың үҙе тураһында Малбай Дауытов һөйләне.

12-14 ауғыс, 1952 .